Уҡытыусыһы: Исламова Зүлиә Хәмзә ҡыҙы
Класс: 6-сы б
Дата: 19.02.2018 йыл
Предмет: башҡорт теле

## Дәрестең технологик картаһы

| | |
|---|---|
| Дәрес темаһы | **Лексик тема: “Ишәк, эт, бесәй, әтәс” әкиәте.**<br>**Грамматик тема: Сифат темаһын ҡабатлау.** |
| Дәрес төрө | Яңы теманы өйрәнеү. |
| Дәрес маҡсаты | **Белем биреү маҡсаты**: уҡыусыларҙы “Ишәк, эт, бесәй, әтәс” әкиәте менән таныштырыу, сифат темаһы буйынса белемдәрен арттырыу, нығытыу.<br>**Үҫтереүсе:** әкиәттәр буйынса бәйләнешле телмәр күнекмәләрен, үҙ-ара ярыш сәмен үҫтереү, өйрәнгән һүҙҙәрҙе телмәрҙә ҡулланыу, ижади фекерләү һәләттәрен үҫтереү;<br>**Тәрбиәүи**: Телгә һөйөү, әкиәттәргә, бер-береһенә ҡарата ихтирамлылыҡ, дуҫ, татыу йәшәү тойғоларын тәрбиәләү. |
| Көтөлгән һөҙөмтәләр: | **Предмет УУЭ һөҙөмтәләре**: тема буйынса яңы һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр өйрәнеү, уларҙы бәйләнешле телмәрҙә ҡулланыу.<br>**Метапредмет (предмет-ара) УУЭ һөҙөмтәләре**:<br>а) регулятив: уҡытыусы менән берлектә дәрес темаһын, маҡсатын билдәләргә күнегеү, булған белемдәрен барлау, баһалау;<br>б) танып белеү: өлгө буйынса эш итә белеү, өйрәнеү (төркөмләп эшләй белеү, файҙалыһын һайлау);<br>в) коммуникатив: темаға ҡарата бәйләнешле текст төҙөй белеү, үҙ-ара аралашыу, төркөмдә хеҙмәттәшлек итә белеү.<br>**Шәхси УУЭ һөҙөмтәләре:** үҙаллылыҡ сифаттары үҫтереү, туғандарына, дуҫтарына, класташтарына иғтибарлы, ихтирамлы булыу, этикет белеү. |

| | |
|---|---|
| Йыһазландырыу | Электрон дәреслек, аудионан тыңлау өсөн яҙма, интерактив таҡта, карточкалар, әкиәттәрҙән иллюстрациялар, презентация. |
| Предмет-ара бәйләнеш | Тормош һабаҡтары, Башҡортостан мәҙәниәте. Рус теле һәм әҙәбиәте менән туранан тура бәйләнеш, рус теле менән дәресте сағыштырып алып барыу |

| **Дәрес этаптары** | **Уҡытыусы**<br><br>**эшмәкәрлеге** | **Уҡыусылар**<br><br>**эшмәкәрлеге** | **Дәрестең һәр этабында формалаштырылған УУЭ** ***(регулятив, танып белеү, коммуникатив, шәхси)*** |
|---|---|---|---|
| I.Ойоштороу моменты.<br><br>Уҡыу эшмәкәрлегенә мотивация булдырыу | I.- Һаумыһығыҙ, уҡыусылар!<br>- Хәйерле көн!<br>- Кәйефтәрегеҙ нисек?<br>Ҡояшлы иртә кеүек<br>Башҡорт телен,<br>Дәүләт телен<br>Өйрәнергә тип килдек.<br>*(Презентацияла ҡарап уҡып китеү)*<br>**Уҡыусылар беҙ һеҙҙең менән бөгөн дәрестә төркөмдәргә бүленеп эшләйәсәкбеҙ. (4 төркөм)**<br>**1**-се төркөм: Тырыштар<br>2-се төркөм: Отҡорҙар<br>3-сө төркөм: Зирәктәр<br>4-се төркөм: Тапҡырҙар<br>*Һәр дөрөҫ яуап өсөн смайликтар биреләсәк.*<br>**Ә инде дәресебеҙҙең девизы шундай:** | Уҡыусыларҙың яуаптары<br><br><br><br><br><br><br>**Мин дәрестә тырышып эшләйәсәкмен һәм юғары баһа аласаҡмын!** | **Регулятив**: үҙҙәренең уҡыу эшмәкәрлеген ойошторалар;<br><br>**Шәхси**: белем алыуға, уҡыуға ҡарата, дәрескә ыңғай ҡараш күрһәтәләр.<br><br>**Танып белеү**: яңы белем алыу кәрәклеген аңлайҙар, үҙҙәренең эшмәкәрлеген планлаштыралар. |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | II.**Фонетик-орфоэпик күнегеүҙәр.**<br>Презентацияла һүрәттәр ҡарау:<br>-Ат сабҡанда нисек тауыш сығара? (телдәрҙе шартлатыу);<br>-Бал ҡорто нисек безелдәй? (бзззззз)<br>-Ҡаҙ нисек ҡаҡылдай? (ҡа-ҡа-ҡа)<br>-Һыйыр нисек мөңөрәй? (Мөөөө)<br>-Әтәс нисек ҡысҡыра?(Кикәрик-ү-үк)<br>- Телебеҙҙе шымартып алайыҡ.<br>**Йомро – йомро йомғаккайҙы**<br>**Йә, балалар һүтәйек.**<br>**Тылсым – әкиәт донъяһына,**<br>**Йәһәт барып етәйек!**<br>Уҡып ишеттерәм, эстән уҡып сығалар, минең арттан ҡабатлағыҙ.<br>Кәйефтәрҙе үҙгәртеп уҡыу.<br>Был шиғырҙа һеҙ ниндәй башҡорт хәрефтәрен күрәһегеҙ? | Уҡыусылар башҡорт теленең һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәрен, һүҙҙәрҙе уҡытыусы артынан ҡабатлайҙар.<br>.<br>шатланып уҡыу;<br>илап уҡый.<br>ижектәргә бүлеп уҡыу. | |
| II.Уңыш ситуацияһы тыуҙырыу (белемдәрҙе актуалләштереү) | **Өй эшен тикшереү:**<br>Һәр төркөмдән берешәр уҡыусы БХИ нан: мәҡәл, йомаҡ, һынамыш, тиҙәйткес уҡып китәләр. 1.Уҡыусылар, Былар бөтәһе лә БХИ жанрҙарына ҡарай. | Уҡыусылар яуап бирә.<br>Себеште көҙ һанайҙар.<br>Балдың тәмен айыу белә.<br>Мейес башында биш бесәй… | **Регулятив:** уҡыу мәсьәләһен аңлау, ҡабул итеү, маҡсатҡа ярашлы эштәрҙе башҡарыу, ҡуйылған һорауға яуап бирә белеү.<br>**Танып белеү:** кәрәкле мәғлүмәтте текстан ишетеп аңлау |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | 2. 4 төркөмгә 1-шәр йомаҡ таратып биреү.<br><br>- Үҙе күп йөк ташый,<br><br>Үҙе яй бара,<br><br>Нимә ул?**( Ишәк)**<br><br>- Төнөн дә, кисен дә<br><br>Һаҡлай ул беҙҙе ,<br><br>Үҙе дуҫ та була ала. **(Эт)**<br><br>- Ярата ул мейес башын<br><br>Йә , әйтеп ҡарағыҙ нимә ул?**(Бесәй)**<br><br>- Иртән тора, уята ул беҙҙе,<br><br>Ҡыҙыл тарағы бар үҙенең? **(Әтәс)**<br><br>Һеҙҙең алдығыҙҙа 4 яуап ята дөрөҫ яуапты һайлап алығыҙ.<br><br>Таҡта алдына сығып теҙелеп баҫалар.<br><br>Уҡыусылар, хайуандар тураһында йомаҡтар ғына түгел әкиәттәр ҙә бар. | Ат бышҡырһа ямғырға. Бесәй моронон ҡаплап ятһа, көн һыуыта. ..<br><br>йомаҡтар сисеү…<br><br>һынамыштар һ.б<br><br>Һәр команда яуаптарҙы һайлап алалар **(Ишәк, эт, бесәй,әтәс һүрәттәрен).** | **Коммуникатив:** тыңлайҙар һәм диалогка инәләр, әңгәмәгә ҡушылалар<br><br>**Шәхси**: уҡыу эшмәкәрлегенә мотивация булдырыу, уҡыуға, яңылыҡ белеүгә ынтылыш,<br><br>ҡыҙыҡһыныусанлыҡ сифаттары формалаша. |

| | | | |
|---|---|---|---|
| III.Уҡыу мәсьәләһен ҡуйыу. | - Шулай итеп, беҙ бөгөн дәрестә нимә тураһында һөйләшәсәкбеҙ?<br>- Үҙебеҙгә ниндәй маҡсат ҡуябыҙ?<br>Тимәк, беҙ "Ишәк, эт, бесәй, әтәс" әкиәте менән танышып китәсәкбеҙ. | Әкиәт тураһында һөйләшәсәктәре тураһында әйтәләр.<br><br>Уҡытыусы менән берлектә дәрескә маҡсат ҡуялар. | **Танып белеү**: логик фекерләү (сылбырын) алгоритмын төҙөйҙәр.<br><br>**Регулятив:** уҡытыусы менән берлектә дәрестең маҡсатын билдәләйҙәр. |
| IV.Яңы материалды өйрәнеү.<br><br>Уҡыу проблемаһын сисеү. | **Әңгәмә**<br><br>Уҡыусылар, ә һеҙ ниндәй әкит төрҙәрен беләһегеҙ?<br><br>Һәр төрөн асыҡлап китеү.<br><br>-Презентациянан һүрәттәр ҡарап китеү<br><br>-Уҡыусылар әкиәттәр башҡорт телендә нисек башланып китәләр?<br><br>-Бөгөн танышасаҡ әкиәтебеҙ ниндәй төрөнә ҡарай инде?<br>**Дәреслек менән эшләү:**<br><br>1.Китаптарыбыҙҙың 77-се биттәрен асайыҡ. | Уҡыусылар уҡытыусының һорауына яуап бирәләр һәм әңгәмәлә ҡатнаша.<br><br>Тылсымлы әкиәттәр.<br><br>Батырҙар тураһында .<br><br>Хайуандар тураһында.<br><br>Көнкүреш әкиәттәр.<br><br>Борон-борон заманда...<br><br>**Хайуандар тураһында әкиәткә ҡарай.** | **Регулятив:** өлгө буйынса эшләй белеү, төркөмдә эшләй белеү.<br><br>**Танып белеү:** кәрәкле мәғлүмәтте һайлап алыу, рефлексия үткәрәләр, үҙҙәренең эштәрен яҡлай беләләр, анализ бирәләр.<br><br>**Коммуникатив:** монологик телмәр төҙөй белеү, бер-береһе менән хеҙмәттәшлек итә белеү, үҙ эштәрен анализлау, башҡаларҙы тыңлай белеү, әңгәмәгә ҡушыла белеү формалаша<br><br>**Шәхси:**Башҡорт халыҡ ижаны аша дөрөҫ йәшәргә кәрәк икәнен аңлайҙар; һүҙ байлыҡтарҙы байытыу мотлаҡ икәнен төшөнәләр. |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | **Һүҙҙел эше үткәреү:**<br>Осраҡкан- встретил<br><br>Һөнәр-профессия<br><br>Ҡыйыҡ-крыша<br><br>Ҡыуып сығарғын- выгнал<br><br>Төнәргә-взбираться, садиться на насест для ночевки<br><br>3.Әкиәтте аудиояҙмала тыңлатыу.<br>**Һорауҙар:**<br><br>.Әкиәт шуның менән тамамландымы? Нисек уйлайһығыҙ?<br><br><br><br>-Ниндәй йәнһүрәт рус телендә ҡарағанығыҙ бар?<br><br>**Уҡыу төрҙәре:**<br><br>**1.** -Эстән уҡып сығалар;<br><br>-Һәр төркөмдән бер уҡыусы сығып ишәк , эт, бесәй, әтәс булып диолог уҡып ишеттерәләр; | Һүҙлек дәфтәрҙренә яҙып ҡуйыу һәм иҫтә ҡалдырыу.<br><br><br><br><br><br>Өҡ, әкиәт бының менән генә тамамланманы әлбиттә.<br><br><br><br><br><br><br><br><br>“Бременские музыканты” йәнһүрәте. | |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | -Уҡыусыларҙы шул уҡ ваҡытта баһалап китеү кем яҡшы уҡыған, смайлик биреү.<br><br>**-2. “Иғтибарлы бул”уйыны.**<br><br>-Ҡалышмай уҡыу;<br><br>- ижекләп уҡыу;<br><br>- шәп итеп уҡыу;<br><br>-шым ғына уҡыу;<br><br>-туҡтап ҡалыу<br><br>- уҡыған юлдарҙы табып дауам итегеҙ.<br><br>**3. Һығымта:**<br><br>-Әкиәт беҙҙе нимәгә өйрәтә?<br><br>-Ишәк, эт, бесәй, әтәс ниндәй һөнәрҙәр беләләр?<br><br>-Ә һеҙ ниндәй һөнәрҙәр беләһегеҙ?<br><br>*Презентация һөнәрҙәр тураһында ҡарап китеү.* | Уҡыусылар ҡалышмай, иғтибарлыҡтарын арттырып эшләйҙәр. Һәр дөрөҫ яуапҡа командалар смайликтар алалар.<br><br>Берҙәм, татыу булырға өйрәтә, һәр кешенең һөнәре булырға тейеш.<br><br>Бесәй-мыяулай, эт-өрә, әтәс-ҡысҡыра.<br><br>*Презентация ҡарау һәм һөйләм төҙөү.*<br><br>**Мин үҫкәс … булырға хыялланам.** | |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | Һеҙҙең һәр берегеҙ киләсәктә һөнәр һайлаясаҡ. Кем булырға хыялланаһығыҙ? | | |
| V**. Ял минуты** | - Уйын уйнап, ял итеп алайыҡ<br><br>1. Күҙ алдығыҙға килтерегеҙ: бер ҡулығыҙҙа тәмле еҫле сәскә, ә икенсе ҡулығыҙҙа шәм. Сәскәне еҫкәйбеҙ һәм шәмгә өрәбеҙ.<br><br>2. Күҙҙәргә ял минуты.<br><br>3.Беҙҙең Башҡортостанда<br><br>Шундай бейек тауҙар,<br><br>Шулай бөгөлә талдар,<br><br>Шулай ҡағына ҡаҙҙар,<br><br>Шунан ырғып алалар,<br><br>Шунан бейеп алалар,<br><br>Шунан шым ғына ултырып<br><br>Тағы белем алалар. | Уҡыусылар ял минутын уҡытыусы менән башҡаралар.<br><br>*Презентация ҡарап башҡаралар.* | **Шәхси:** уйында ҡатнашыу мәҙәниәте формалаша, уҡыу материалына ҡыҙыҡһыныу арта. |

| | | | |
|---|---|---|---|
| VI.Белемде нығытыу(Яңы белемде практикала ҡулланыу) | **Әңгәмә. Күнегеүҙәр аша белемдәрҙе нығытыу**.<br><br>Презентация ҡарау:<br><br>1.Әтәс, эт, ишәк, бесәй һүрәтәре һәм Ниндәй? Һорауы.<br><br>Бирелгән һүҙҙәрҙән һәр команда таҡтала һүҙбәйләнештәр төҙөйҙәр.<br><br>-Нимә тураһында һүҙ бара?<br><br>- Әтәс һүҙеннән сығып төрлө төҫтәге һүҙенә ниндәй һорау ҡуябыҙ?<br><br><br><br>-Ниндәй? Һорауына ниндәй һүҙ төркөмә яуап булып килә.<br><br>2. Шулай итеп беҙ һеҙҙең менән сифаттарҙы ҡабатлап китәбеҙ.<br><br>Презентациянан ҡарау:<br><br>- Сифат нимәне белдерә?<br><br>-Миҫалдар килтерегеҙ, сифаттар менән.<br><br>**Эш дәфтәрҙәре менән эшләү:** | Яуаптар:<br><br>Уҫал, көслө, аҡ, төрлө төҫтәге,<br><br>Айыу көслө, төлкө хәйләкәр, ҡуян ҡурҡаҡ, ишәк яй, бесәй аҡ, әтәс батыр,эт тоғро.<br><br>Ниндәй?<br><br>Батыр әтәс<br><br>Сифат+исем<br><br><br><br>Әңгәмәлә ҡатнашалар.<br><br>Сифат.<br><br>Билдәне, төҫтө, форманы…<br><br><br> | **Шәхси:** тасуири уҡыу күнекмәләре формалаша, уҡыуға ҡарата ҡыҙыҡһыныу<br><br>**Регулятив:** уҡыу мәсьәләһен (биремен) аңлау, ҡабул итеү, үҙҙәренең эшмәкәрлеген планлаштырыу, ҡуйылған һорауға яуап бирә белеү.<br><br><br><br>**Коммуникатив:** диалог төҙөйҙәр, һорауҙарға яуап бирәләр, башҡаларҙы тыңлай белеү, әңгәмәгә ҡушыла белеү формалаша<br><br>**Танып белеү:** анализлау, сағыштырыу, алған мәғлүмәтте дөйөмләштереү |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | -Дәфтәрҙәрҙе астырыу, датаны яҙыу, класс эше.<br><br>-Бирелгән һүҙҙәрҙе тәржемә итеп китеү.<br><br>-Был һүҙҙәр ниндәй йыл миҙгеленә хас.<br><br>-Һәр төркөм яуаптарҙы барлап сығалар.<br><br>-Тәкдим ителгән һүҙҙәргә икенсе бағаналағы ҡайһы сифаттар тап килә? Мәғәнәләре тап килгән сифаттарҙы һайлап яҙығыҙ.<br><br>-Һәр төркөмдән 1-шәр уҡыусы таҡтала һүҙбәйләнешәтрҙе яҙалар, ә ҡалғандар урындарында эште дәфтәрҙәрҙә башҡаралар.<br><br>**Әңгәмә:**<br><br>- Әкиәттәрҙең ниндәй төрҙәре була?<br>- “Ишәк, эт, бесәй, әтәс” әкиәте ниндәй төргә ҡарай.<br>- Ниндәй һүҙ төркөмөн ҡабатлап киттек?<br>- Ул нимәне белдерә?<br>- Миҫалдар килтерегеҙ? | Ун туғыҙынсы февраль<br><br>Класс эше.<br><br>36-сы күнегеү.<br><br>Ҡыш. Презентацияла ҡыш һүрәте.<br><br>Мәҫәлән:<br><br>Ҡыш ап-аҡ<br><br>Ағас яланғас<br><br>Болот ҡара<br><br>Һауа саф<br><br>Ел көслө<br><br>Көн һыуыҡ<br><br>.<br><br>Презентация ҡарау:<br><br>Әкиәттәр<br><br>↓<br><br>Тылсымлы әкиәттәр. | |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | **Бына укыусылар беҙҙең бөгөнгө дәресебеҙ ниндәй ҙур, ҡыҙыҡлы, мауыктырғыс килеп сыкты.** | Батырҙар тураһында .<br>Хайуандар тураһында.<br>Көнкүреш әкиәттәр. | “Ишәк, эт, бесәй, әтәс” әкиәте |
| VII. Өйгә эш | 1. Әкиәт буынса һүрәт төшөрөргә.<br>2. Сифат +исемдән килгән 5 һүҙбәйләнеш төҙөргә.<br>3. Һөнәр исемдәрен яҙып килергә. | Көндәлеккә өй эшен яҙалар, өйгә эш буйынса һорауҙар бирәләр | **Танып белеү:** кәрәкле мәғлүмәтте һайлап алыу, анализлай, һайлай белеү.<br><br>**Регулятив:** яңы уҡыу мәсьәләһен ҡабул итә белеү, үҙҙәренең эшмәкәрлеген планлаштырыу.<br><br>**Коммуникатив**: шиғыр ятлау, һүҙҙәр ятлау |
| VIII.Дәресте йомғаҡлау.<br><br>Эшмәкәрлеккә рефлексия. | - Шулай итеп, бөгөн дәрестә нимә белдегеҙ?<br><br>- Нимәгә өйрәндегеҙ? Дәрес башында ҡуйған маҡсаттарға ирештекме?<br><br>- Алған белемдәрегеҙ тормошта кәрәк булырмы? Уҡыусыларҙы баһалау.<br><br>- Дәрестә алған белемдәрегеҙҙе тормошта ла ҡулланырһығыҙ, тип ышанам. Рәхмәт. | Уҡыусыларҙың яуаптары. Нимәгә өйрәнеүҙәре тураһында әйтәләр. Дәрес башында ҡуйған маҡсаттарҙы иҫкә төшөрөү, баһалау битендә үҙҙәренә баһалар ҡуялар.<br><br>**Һәр команда үҙҙәренең смайликтарын һанайҙар һәм бер береһен төркөмдәрендә баһалап китәләр.**<br><br>**Ҡайһы команда беренсе урын, икенсе,өсөнсө, дүртенсе урында әйтеп китеү.** | **Регулятив**: үҙҙәренең эшмәкәрлегенә баһа биреү, уҡытыусының баһаһына адекват ҡараш формалаша.<br><br>**Шәхси:** үҙ үҫеш, баһалау һәләте үҫә.<br><br><br> |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | | **Шулай уҡ уңыш баҫҡысында үҙҙәренең исемдәрен яҙып баһалап китәләр.** | |